8 класс. Дата _________

***Тема : Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә***

**Лексик тема:** Тәрбиәле кеше ниндәй булырға тейеш ?

**Маҡсат:** Уҡыусыларға ҡушма һөйләмдең үҙенсәлектәрен өйрәтеү, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлдатыу; бирелгән һөйләмдәр буйынса бәйләнешле телмәр үҫтереү; өлгөлө һәм яҡшы сифаттар тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** Таблицалар, «Ҡыҙыҡлы грамматика», «Дидактик материалдар», Эш төрҙәре менән карточкалар

**Дәрес барышы**. I. 1. Ойоштороу мәле.

Хәйерле көн теләп ҡояш ҡалҡа,
Уяналар ауыл, ҡалалар.
Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем,
Хәйерле көн һеҙгә, балалар!

Һаумыһығыҙ, укыусылар! Барыбыҙға ла уңышлы эш көнө теләп дәресебеҙҙе башлайыҡ.

Таҡталағы һөйләмдәрҙе сағыштырыу.

1. Шаулап-гөрләп ергә яҙ килә.
2. Шаулап-гөрләп ергә яҙ килде һәм ҡарҙар иреп бөттө.

Ике һөйләм бер-береһенән нимәһе менән айырыла?

2. Дәрестең темаһы һәм маҡсатын асыҡлау

3. Өйгә эште тикшереү: 55-се күнегеү – график диктант.

4. Үтелгәндәрҙе нығытыу:

- Ҡушма һөйләм менән ябай һөйләм араһында ниндәй айырма бар ?
- Ябай һөйләмдәр ниндәй төрҙәргә бүленә ?
- Бер составлы һөйләмдәргә ниндәй һөйләмдәр инә ?

**II. 1 Т.ү. Әңгәмә.** « Тәрбиәле кеше ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?» Яҡшы тәрбиәне ҡайҙан һәм нисек алалар? «Хөрмәт иткән хөрмәт күрер» тигән әйтемде нисек аңлайһығыҙ ?

**2**. “Тәрбиәле уҡыусы” тигән темаға өс ҡушма һөйләм төҙөргә, һөйләмдең нигеҙен билдәләргә.

**Яңы тема өҫтөндә эш.** Таблица ярҙамында аңлатыу.

Ике һәм унан да артыҡ ябай һөйләмдән төҙөлгән һөйләм **ҡушма һөйләм** тип атала: *Көҙгө ямғырҙар өҙлөкһөҙ һибәләй башланы, аяҡ аҫтындағы япрактар хәҙер кыштырламай.*

Ҡушма һөйләмдәге ябай һөйләмдәр бер - береһенә интонация менән дә, ***һәм, ә, ләкин, йә, йәки, әгәр, шуның өсөн, шуға күрә, сөнки*** кеүек ярҙамсы

һүҙҙәр менән дә бәйләнеп килеләләр, ярҙамсы һүҙ алдынан һәр саҡ өтөр ҡуйыла.

1) Теҙмә ҡушма һөйләм: *Ҡулың оҫта булһын, һүҙең кыҫҡа булһын.*

2) Эйәртеүле ҡушма һөйләм: *Ир бөтмәһә, ил бөтмәҫ.*

**3. Нығытыу өсөн күнегеүҙәр башҡарыу**

а) Йондоҙсоҡ менән бирелгән һөйләмдәрҙә ҡайһыһы ябай, ҡайһыһы ҡушма икәнен нисек билдәләп була ?

б) 57-се күнегеү телдән : ҡушма һөйләмдәрҙе табып грамматик нигеҙен әйтергә.

в) 61-се кунегеүҙе таҡтала: Ябай һөйләмдәрҙән ҡушма һөйләмдәр төҙөргә.

***Ял минуты.*** «Ҡыҙыҡлы грамматика», 44-се биттәге шаярыуға ҡоролған һорауҙарға яуаптар алыу.

**4. Индивидуаль эш.** Эш төрҙәре менән карточкалар таратыла:

а) ҡушма һөйләмдәрҙең грамматик нигезен билдәләргә;

б) ҡушма һөйләмдәрҙе һүҙбәйләнештәргә айырырға.

в) ҡушма һөйләмдәрҙе ябай һөйләмдәргә айырырға.

**5. Т.ү.** 60-сы күнегеү буйынса: Мәҡәл, әйтем, һынамыштарҙы төшөнөү.

**6. Һүҙлек эше:** *олпатлылык, һакымлылык. өлкәрлек, етдилек*

**III. Дәресте йомғаҡлау:**

-Ҡушма һөйләм эсенә ингән ябай һөйләмдәр үҙ-ара ниндәй юл менән бәйләнә ?

- Ҡушма һөйләмдәр ниндәй ике ҙур төркөмгә бүленә ?

**Өйгә эш:**

1. 62–се күнегеү
2. “Тәрбиәле быуын” ижади эш
3. Әҙәп-тәрбиә темаһына мәҡәлдәр яҙырға